*Тимерғәле* **КИЛМӨХӘМӘТОВ**

# Кеше күңелдәре бөтәйһен

Тимер Йосоповтың 2002 йылда донъя күргән “Ваҡыт каруаны” китабын асып ебәргән бик фәһемле “Үрҙәргә ҡалҡынайыҡ” шиғырында ошондай юлдар бар:

Осоп киттем,
Ни булһа ла
Булыр инде һуңынан.
Йәнгә урын тапмай, күктә
Бәреләм дә һуғылам.
Донъя ниндәй күркәм икән, —
Бәхеттән сәсәүҙәрем.
Төштәй генә булыр инде
Еремдә йәшәүҙәрем...

Бында бөтәһе лә бар: замана үҙгәрештәренән бәрелеп-һуғылыуҙар, донъяның илаһи матурлығын күреп, бәхеттән сәсәүҙәр, ғүмерҙең, бер һаплам еп шикелле, иҫ киткес ҡыҫҡа икәнлеген төшөнөп тетрәнеүҙәр. Ошо мотивтарҙың һәммәһе йыйынтыҡтың битенән битенә, буйынан-буйына тере йәнле рух, уй-хис рәүешендә үҫтерелә, киңәйтелә, тәрәнәйтелә. Шиғырҙар, берсә әрнеүле, берсә үкенесле, берсә елкендергес тойғолар уятып, ғәжәйеп көс менән үҙенә тарта, бер тында уҡыла. Фажиғәле, тетрәндергес хәл-әхүәлдәр, шик-шөбһәләр, икеләнеүҙәр әленән-әле килеп инһәләр ҙә, бөтә китаптан яҡты, изгелекле хис-тойғолар, өмөт менән һуғарылған оло хис-аҡыл һынлана. “Донъя йәмен күрергә тип, Үрҙәргә артылайыҡ” тигән тәғбирҙә шул бик асыҡ дөйөмләштерелгән, булһа кәрәк. Танылған әҙәбиәт ғалимы профессор Әнғәм Хәбиров яңыраҡ ошолай тип яҙғайны: “Тимер Йосопов — бөгөнгө башҡорт шиғриәтендә хаҡлы рәүештә төплө һәм ныҡлы урын биләгән шағирҙарҙың береһе... Иң мөһиме — шағирҙың, аҙымдары ауырая барыуға

*Тимер Йосопов*
*(Тимербай Йосоп улы Йосопов)*



ҡарамаҫтан, ҡая өҫтөндә уйланып, баҫып торор өсөн заман елдәренә хатта күкрәген ҡуйып, үҙе ҡасандыр бер тапҡыр һайлап алған юлдан тайпылмайынса, туҡтауһыҙ алға хәрәкәт итеүендәлер" (Ағиҙел. 2003, №12, 134-се б.). Әле һүҙ барған китабы менән шағир ана шул хәҡиҡәтте йәнә бер раҫлай.

Йыйынтыҡҡа 1997—2001 йылдарҙа яҙылған йөҙәрләгән шиғыр тупланған. Улар буйынса Тимер Йосопов ысын профессиональ шағирҙарса, дәрт-дарман менән, тыныу белмәй, ең һыҙғанып ижад итеүсе булып күҙ алдына баҫа. Китаптың исеменән күренеүенсә — "Йылдар каруаны" — был юлы автор йәшәлгән йылдарҙың, ғүмер ағышының мәғәнәһе хаҡында уйланыуҙарға баҫым яһауҙы үҙәккә ҡуя. Шағирҙың үҙ ғүмеренең бик мәртәбәле мәленә күтәрелеүе лә быға ыңғай килә, күрәһең.

Ғүмер тигән үрҙәрҙә мин,
Ә түбәндә — болот...
Мин — ғүмерем түбәһендә,
Йәнәшәмдә — йәшен, —

тип елкенә ул.

"Йылдар каруаны"н тотош көйөнсә баһалағанда, уны "лирика" тип атап булыр ине. Сөнки уның үҙәгендә — Шағир, ә шиғырҙар — Шағир монологы. Шуныһы иғтибарҙы тарта: ваҡиғаларға шул тиклем бай бөгөнгө ысынбарлыҡ китапта үҙаллы образ булып китмәй, ә ниндәйҙер бер ярсығы, осмото, билдәһе менән шағир уйҙарына, шағир хистәренә үрелә. "Үҙгәреш" тип аталған шиғри шәлкем ана шуға дәлил. "Үҙгәреш" тигән һүҙҙе яманаты сыҡҡан "перестройка" тип аңларға күнегеп бөтөлгән. Шәлкемдә шул турала һүҙ барыр, тип көтәһең. Баҡтиһәң, шағир үҙендәге үҙгәрештәр тураһында бәйән итә икән. Бөтәһе лә элеккесә кеүек: "Аттар йөрөй йортом ҡырында... Малдар йөрөй ҡырым осонда... Үлән араһынан сиңерткәләр һикереп сыға, тере осҡондай... Бер ни үҙгәрмәгән кеүек..." Ләкин:

Туҡта!
Һағыш сәнсеп алды йөрәкте.
Яуҙа ауған ҡарт һалдаттай ята, —
Дауыл йыҡҡан минең тирәкте.
Ҡисә генә,
Эй, шыбырлап ҡына
Серен аса ине тирәгем.
Бер арала шаян күршеһенә
Төртөп ала ине терһәген.
Ҡисә генә,
Гүйә, кисә генә,
Мин — малаймын,
Ә ул йәш ине.
Ғүмер уҙа.
Хәтәр дауылдарҙан
Ҡалып булмай, ахыры, йәшенеп.

"Мин — малаймын, ә ул йәш ине" — бына үҙгәреш ҡайҙа! Ғүмер тураһында, хәтәр дауылдарҙан ҡалып булмау тураһында өҙгөләнеү-уйланыу. "Йылдар каруаны" шағир тормошона ана ниндәй киҫкен үҙгәрештәр алып килә. Был аяуһыҙ көстө туҡтатырға бер ниндәй ҡөҙрәт юҡ донъяла. Тышҡы үҙгәрештәр,




*Т.Йосоповтың 2007 йылғы һайланма әҫәрҙәр китабының титул бите*

төрләнеү-һынылыштар аша тормош, донъя, йә камиллашып, йә зымзыя килеп, алға тәгәрәй. Ә шағирға "малайлыҡ" кире ҡайтмаясаҡ. Ошо аҡыл-һабаҡ йөрәкте ҡыҫа. Лириканың бөтә ҡәҙер-ҡимммәте лә тәрән мәғәнәле уй-хистәрҙе уята алыуҙа түгелме ни? Ә "Тирәктәрем төҫлө олоғаям шул, Инҙәремә ҡунмай һандуғас... Һыуҙай аға икән ғүмерем. Әле генә таңдар атҡайны бит, Алдарымда — шәфәҡ күмере" тигән юлдар "малайлыҡтан" "олоғайыуға" күсеүгә бәйле тыуған моңһоу кисерештәрҙе көсәйтеп килә. "Олоғая" барған шағир "йәшлеге юҫығына", шул арала "үткәндең офоғона" әленән-әле әйләнеп ҡайта. Моңһоу уй-хистәрҙең сәбәп сиктәре бермә-бер киңәйеп тә китә. Йәшлектең күпмелер өлөшө һүтелеп ҡалған завод цехтарына барып һуғылғас, шағир шаңҡып ҡала. "Завод зыңы ишетелмәй, Цехтары туғарылған... Тынып ҡалған ҡоролмалар Торғаны бер һөлдә бит. Иҫтә: Цехым утҡа һалып, Минән үс ҡандырғаны. Хәҙер телһеҙ станоктар Үлек мал ҡабырғаһы". Бына шулай шағирҙың күңел яраһы донъяһы, тышҡы донъяның күҙгә төртөлөп торған яҡтары менән бәйләнешкә инеп, ергә ерегә төшә. "Һуғыш йылы" шиғырында шағир "Ҡыштар һалҡын булды" тип иҫләп килә-килә лә былай тип йомғаҡлап ҡуя:

Алыҫ Ҡөнсығыштан туңмайбыҙ ул,  
Өшөмәйбеҙ тыуған төйәктә.  
Ултырып та ҡалған һалҡын иңрәй,  
Геүләй һымаҡ минең һөйәктә.

Бында барыһы ысын: бөгөн, айырыуса Алыҫ Ҡөнсығыштағы, Себерҙәге төбәктәрҙә йорттарҙың йылытылмауы, халыҡтың ундағы ҡалаларҙы ташлап китеүе, үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа өшөмәүебеҙ, ауыр һуғыш йылдарының һыуыҡтарын електәренә һеңдергән кешеләрҙең һөйәктәр һыҙлауҙан буҙлауҙары. Шиғырҙа улар киңәйтеп күрһәтелмәгән, тик әйтеп кенә кителгән. Шулай ҙа бөтәһе аңлашылып тора, хатта теп-тере булып күҙ алдына баҫа. Шуларҙың һәммәһен үҙе күреп, үҙе кисергән шағир ғына ошолай яҙа алалыр.

Тимер Йосопов шиғриәтенең Ваҡыт, Донъя менән бәйләнеш үҙенсәлектәре бары тик Тимер Йосоповса. Ил тарихында яңғыраш алған ваҡиғалар, шәхестәр, идеяларҙы тәфсирләп, бөтә тулылығында теркәүҙе маҡсат итеп ҡуймай ул. Барыһы бер-ике штрих аша, юлайҡан ғына белдерелә. Тышҡы донъя менән бәйләнеш булдырыуҙың башҡа төрлө юлдарын һайлай әҙип. Һәм нәҡ лирикаға

хуш килгән юлдар хәл иткес урынды ала. Тәбиғәт күренештәре (йылғалар, тауҙар, далалар), йыһан есемдәре (ай, ҡояш, йондоҙҙар, болоттар, йәшен), миҙгелдәр (яҙ, йәй, көҙ, ҡыш, таң, шәфәҡ, көн, төн) кеүек күренештәр менән тулып балҡый шиғырҙар. Бер үк әйбер бер нисә әҫәрҙә ҡабатланып, төрлө яҡтан кәүҙәләндерелә, нағышлап эшләнгән поэтик образ дәрәжәһенә күтәрелә. Бер шиғыр, мәҫәлән, былай ослана:

Бер ҡараһаң,
Ялҡындарҙа сатнап,
Янып ятҡан ерем кеүекмен.
Ҡыҫыр болот тауға, әй, һарыла,
Ҡырға баҡһам, ҡырым ярыла.
Нисә айҙар ҡырым ямғыр күрмәй,
Түҙемлектең баҫам ярына.

Бында тәбиғәт тын ала, бында шағир аһы ишетелә. Дөйөм рух — көйөнөслө уй-хистәр. Нисә айҙар ямғыр күрмәгән ергә ҡарап, түҙемлек ярына баҫҡан шағирҙың тәрән көрһөнөүе ҡолаҡҡа ишетелә. Ошо яралғы башҡа шиғырҙарҙа ла моронлай: "Ерем менән мин дә янам инде...", "Туғарылмайыҡсы, егек аттар, быуһа ла, тим, беҙҙе ҡоролоҡ". Күп кенә осраҡтарҙа миҙгел шиғырҙары рәссамдарса эшләнгән этюд рәүешен ала. Әйтәйек, ошо әҫәр:

Гөлдәрем аса күҙҙәрен,
Күҙҙәрен аса иртән.
Билен яҙҙырған гөл әйтте:
— Былай булғас, мин шиңмәм...
Һикерә-һикерә йырлап аға
Тоноҡ йондоҙло шишмәм.
Яҙ ташҡыны тынып ҡалған —
Хәле юҡ ҡыуған аттың.
Әй, йондоҙло шишмәһе, тим,
Шишмәһе тыуған яҡтың.

Тәбиғәт донъяһының илаһи бер мәлен тасуири һында күҙ алдына баҫтырған шиғырҙарҙы уҡығанда Тимер Йосоповтың ҡаурый ҡәләм көсөн бөтә барлығында тояһың. Дәлиленә йәнә бер шиғыр:

Ҡайҙа баҡма:
Бар тирә-йүн
Йәшеллектән тулышҡан.
Бары сәскә еҫе килә
Йыһан тигән ҡыуыштан.
Болондарҙа һемерәмен
Бесән еҫен тыумыштан.
Йыһан тигән был тирмәбеҙ
Тик нурҙарҙан тулышҡан.
Үләндәрҙең еҫтәренән
Әллә инде сәсәйбеҙ,
Ҡыуанысым — Башҡортостан,
Яҡты илдә йәшәйбеҙ.

"Сәскә... Бесән еҫе... Йыһан... Башҡортостан..." Тәү ҡарашҡа бер-береһенән ярайһы йыраҡ торған есемдәр. Шағир ҡәләме уларға ҡағылып ҡына үтә һәм

уларға йән керә, береһенә-береһе береккән бөтөн донъя барлыҡҡа килә. Шуның уртаһына Шағир баҫҡан. Йәйге матурлыҡ илен күҙ алдына баҫтырған этюд Башҡортостандың гүзәллеге тураһында шатлыҡ ауазы булып яңғырай. Бәләкәй шиғырҙың оло йөкмәткеһе шулай хасил була.

“Йылдар каруаны” йыйынтығында Тимер Йосоповтың бөтә шиғриәтенә хас поэтик стилдең төп үҙенсәлектәре артабан үҫтерелә. Бында иң ҙур һәм иң төп художество күрһәткесе — ритмик-интонацион ҡоролош. Шағир әле башланғыс ижадында уҡ шиғырҙарын ябай һөйләү ағышында ҡорҙо. Ошо йүнәлеш барған һайын нығынды, камиллашты. Бөгөн ул башҡорт поэзияһында Ғ. Сәләм, Р. Ниғмәти, Р. Бикбаев традицияларын дауам итә, үҫтерә. Ябай һөйләү интонацияһына ҡоролоу шиғырҙың халыҡсан, тәбиғи, тау йылғаһы шикелле шаулап ағыуын тәьмин итә. Строфа төрҙәре, рифма типтары ритмик-интонацион шиғыр талаптарынан сығып ойошторола. Шиғри гармонияға өлгәшеүҙә Тимер Йосопов үҙ юлын, үҙ алымдарын булдырыуға өлгәшкән шағир. Бер үк шиғырҙа строфалағы юлдар һанының төрлөсә килеүенә, рифмалашыуҙың ҡәтғи бер ҡанунға һыйып бөтмәүенә, әҫәр камиллығының ритм һәм интонация ярҙамында өлгәшелеүенә тиҫтәләрсә өлгө килтерергә мөмкин. Шуларҙың береһенә генә күҙәтеү яһағанда ла шағирҙың шиғыр техникаһы менән ни тиклем иркен эш итеүен асыҡ күрергә була. “Салауат тауышы” тигән шиғыр:

Әйтерһең дә, Ер үҙәге —
Әбей батша кендеге.
Хатта йөҙөнә сыҡҡанмы
Ҡуҡырлығы, кемлеге.
Өҫтә ҡояш ҡара яна, —
Крәҫтиән әпәйе.
Дин китабы...

*Тимер Йосопов (алда уңдан икенсе) курсташтары менән*



Ҡулын һала,
Ҡулы — тауыҡ тәпәйе.
— Һаҡлағыҙ ил бөтөнлөгөн,
Илебеҙ бәрәкәтен.
Эттәй күҙәтә ярандар
Хакимә хәрәкәтен,
Ҡулының хәрәкәтен.
Кәк(е)рәйгән бармаҡтары,
Гүйә, дарҙағы ырғаҡ.
Һөргөн китер башҡорттарҙың
Үтер юлдары һырғаҡ,
Үтер юлдары һырғаҡ.

Шиғырҙың тәүге строфаһы дүрт юлдан тора, ҡалған өс строфа — бишәр юллыҡ. Тәүге строфала — икенсе-дүртенсе юлдар, икенсе строфала — икенсе-бишенсе юлдар, һуңғы ике строфала икенсе-дүртенсе-бишенсе юлдар рифмалаша. Норматив ҡанундар буйынса ҡарағанда, шиғыр закондары һаҡланған, тип әйтеп булмай. Ә әҫәр бар һәм ул бер тында уҡыла, сөнки уның эске тәбиғи ағышы булдырылған. Ундағы бөтә әҙәби элементтар йөкмәткене күргәҙмәле формалаштырыу эстетикаһына буйһондоролған. Әбей батшаның, йәнәһе лә, ил хәстәрен ҡайғыртып, һөргөн китер башҡорттарҙы хөкөм итеүен аҫтыртын фашлау шиғырға кинәйәлек бирә. Тормоштағы сираттағы бер фарс яһалмалыҡ образы рәүешендә кәүҙәләндерелә. Поэтик бурыстың ҡатмарлылығы, шул рәүешле шиғыр төҙөлөшөнөң әҙәбиәт ҡанундарынан күпкә киң килеүен дә талап иткән. Ошо уҡ хәл сағыштырыу кеүек һүрәтләү сараһының бик ишле һәм үҙенсәлекле бирелештәрҙә килеүен дә ойошторған. Бында биш сағыштырыу урын алған, уларҙың һәр ҡайһыһы үҙенә башҡа, бер-береһен ҡабатламай.

*Филология факультетының 2-се курс студенттары уҡытыусылар менән. Тимер Йосопов — икенсе рәттә һулдан беренсе. 1964 йыл*



“Әйтерһең дә, Ер үҙәге — Әбей батша кендеге” — киңәйтелгән сағыштырыу; “Ҡулы — тауыҡ тәпәйе” — ябай һәм тура сағыштырыу; “Эттәй күҙәтә ярандар” — ялғау ҡушылып яһалған сағыштырыу һәм башҡалар. Ритмик-интонацион шиғыр, аңлашылыуынса, шағирға строфа, рифма, ассоциатив һүрәтләү сараларының төрлөлөгөн, йөкмәткене образлы һәм эмоциональ поэтиклаштырыу мөмкинлектәрен файҙаланыуға юлдар аса.

Тимер Йосопов шиғриәтендә поэтик образлылыҡҡа өлгәшеүҙең бик мәғәнәле һәм ҡыҙыҡлы алымдары осрай. Шуларҙың береһе — халыҡ телендә нығынған һүҙбәйләнештәрҙе көтөлмәгәнсә үҙгәртеп, икенсе юҫыҡҡа бороп ебәреү. Быға бик күп миҫалдар бар. Шуларҙың ҡайһы берҙәре бына нисек килә: “Ә өйҙәре тәпәш тә ул, Өйрәһе шыйыҡ түгел” (халыҡта: “Өйө бейек, өйрәһе шыйыҡ”), “Күҙем ҡаты түгел, тик шөрләйем матурлыҡҡа күҙем тейеүҙән”, “Һылыулығын йоторлоҡ шул һалып алтын ҡашыҡҡа”, “Ә салғым минең алдыра, Алдыра ул һыу кеүек”, “Еңел булған икән ҡул артым”, “Әсәй ялғаны үҙәкте, ауыҙынан өҙөп кенә” һәм башҡалар.

Тимер Йосопов шиғриәтендә башҡорт һөйләү телендәге тәрән мәғәнәле, матур яңғырашлы һүҙҙәр шағиранә яңғырай. “Тандыр усаҡ”, “тыңҡыш елдәр”, “карат” (каратель), “ямғыр баҫлығып яуа”, “кәүшәк ҡар”, “көндәр имшетте”, “көнтыуыш” һәм башҡа шундай һүҙ-образдар халыҡ теленең сикһеҙ байлығын иҫкә төшөрә.

Шағирҙың поэтик стиленә хас йәнә бер һыналған сифат — Ерҙәге ғәҙәти тормош күренештәрен көтөлмәгәнсә, еңел генә, уйынсыҡ уйнатҡан шикелле, Йыһан есемдәре менән тоташтырып тасуирлау.

Тауышым ишетелмәҫлекме ни
Йондоҙҙар сыңдарына.
Үҙем уралмаҫлыҡмы ни
Йәшендәр сымдарына.
Һауаларға атылайым,
Тотайым китек айҙы...
Төпһеҙ күктә сайҡалайым,
Бәүелсәк итеп айҙы, —

ти ул.

Шәйехзада Бабич шиғырҙарына бер ни тиклем ауаздаш өҙөктәр бик күп китапта. Шиғриәттәге ошондай стилдә Ел (Дауыл) образы менән бәйле шиғырҙар айырыуса көсәйтеп ебәрә.

...Елдәр килеп йолҡоп китә
Йөрәгемдең аһтарын.
Йәшен кеүек
Үтте минән,
Әй, дауыллы саҡтарым.
Донъяһына ни булған һуң,
Шығырлай Йыһан-һарай.
Дауылдарға ҡаршы сыҡтым,
Дауыл сәсемде тарай,
Шығырлай Йыһан-һарай.

“Дауыл”, “Йыһан-һарай” бала саҡта ишеткән әкиәттәрҙе хәтерләтә биреп ҡуя. Ғөмүмән, бындай күккә ашҡан образдар Тимер Йосопов поэзияһын

төрләндереп ебәрә, шиғырҙағы кисерештәр ташҡынын тәьҫирлерәк итә. Ошондай образлылыҡ күҙ алдында барған хәл-ваҡиғаны шиғырға әйләндереү өсөн бик кәрәкле һәм урынлы кеүек ҡабул ителә. Алдағы өҙөк шул хаҡта тағы бер тапҡыр һөйләй:

Мал өйөрө һымаҡ,
Сыбыртҡылап
Ҡыуып килтергәндә яуынды,
Тирәк ҡаяһына һуғылды ла
Биле һынды инде дауылдың.

Ошондай шартлы, романтик образлылыҡ Тимер Йосопов ижадында нисектер, сурайып тормайынса, тәбиғи һынлана. “Иңдәремә болот бөркәнеп”, “Ап-аҡ томандарҙы ябынамын”, “Түбәм тейҙе күктәргә”, “Ҡулдар айға етерлек”, “Оҙон юлдар үткәс, Алһыу Ҡояш Тауҙарыма һалды эйәген” һәм башҡалар ана шуны аңғарта.

“Йылдар каруаны” китабындағы шиғырҙарға үтә йыйнаҡлыҡ хас. Уларҙың күбеһе өс йәки дүрт строфанан тора. Шағир ҡыҫҡалыҡҡа ынтыла. Быға өлгәшеү өсөн балҡып торған поэтик деталь таба. “Салауаттың ҡултамғаһы” — ана шундай деталь. Легендар батырҙың ҡултамғаһы бөтөн бер шаңлы дәүерҙе, шул осорҙа йәшәгән данлыҡлы шәхестәрҙең һәм батырҙарҙың тотош тарихын күҙ алдына баҫтыра. Ә “Донъя һыйған” тигән шиғырҙа “Ус яҫыуы хәтле өй нигеҙе” әҫәрҙең эмоциональ һәм тормошсан нигеҙен тәшкил итеүсе художество детале.

Ус яҫыуы хәтле өй нигеҙе,
Ус яҫыуы хәтле ни бары.
Ус яҫыуына бит донъя һыйған,
Һыйған Ер шары.
...Иман һыйған.
Ҡөрьән һыйған...
Ҡескәй өйгә ете бала һыйған.

*Яҙыусылар Ғайса Хөсәйенов, Ноғман Мусин, Тимер Йосопов, Ирек Ҡинйәбулатов, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Марат Кәрим һәм Хәсән Назар Переделкинола, Б.Л. Пастернактың йорт-музейы алдында. 1997 йыл*



...Нишләйем һуң,
Ел һүндергән усаҡ уттарын.
Заман дауылдары аҡтарған шул
Беҙҙең атайҙарҙың йорттарын.

Күренеүенсә, бында поэтик деталь йәмғиәт тарихындағы ауыр ҙа, үкенесле лә, ғорурланырлыҡ та дәүерҙе күҙ алдына баҫтыра. Нәҡ ошо деталь әҫәргә тормошсанлыҡ бирә, халыҡсанлыҡ һулышы яға.

Шағир, билдәле булыуынса, даими рәүештә шиғырҙы аҡлау тигән ижади бурыс алдында тора. Йәғни әҫәр ниндәй маҡсаттан яҙыла — шуны уҡыусыға тойолорлоҡ, аңлашылырлыҡ итеү һәр саҡ күҙ уңында тотолорға тейеш. Ошо ихтыяждан сығып, әҙип әҙәби әҫәрҙең ниндәйҙер бер компонентын айырыуса бер таҫыл, эҙмә-эҙлелек, тәфсиллек менән эшләй. Тимер Йосопов композицияға көс бирә. “Үҙгәреш” тип аталған шиғри шәлкемдең композицияһында ошо хәл бик асыҡ һынлана. Ун дүрт бүлексәнән торған әҫәрҙең һәр бүлексәһе “Бер ни үҙгәрмәгән кеүек миңә” тигән һөйләмдән башлана. Ә бөтә шәлкем әйләнә-тирәләге туҡтауһыҙ яңырыуҙы, йәшәреүҙе йә ологайыуҙы күҙ алдына баҫтыра. “Бер ни үҙгәрмәгән кеүек, тинем, аҙмы дуҫтарым юҡ арала... Быуҙай аға икән ғүмерем... Баҫып торам ғүмерем үрендә... Терелеп тә килә таңдың уты, Биттәремә елдәр ҡуҙ бәрә...” Шағир был шәлкемде контраст алымына ҡорған. Бер ни үҙгәрмәгән кеүек, ә ысынында — донъя үҙгәрештәр өйөрмәһендә ҡайнай. Ҡонтраслылыҡ шиғыр өлөштәрен шундай итеп ойоштора — әҫәрҙең төп фекере, идеяһы зиһенгә буталышһыҙ барып етә. Бөтә шәлкемде ҡоршаусы ҡоласлы контраст әҫәрҙең эсендәге кескәйерәк ҡаршы ҡуйыуҙар менән ентеклерәк ителә:

Бер ни үҙгәрмәгән кеүек, тинем,
Аҙмы дуҫтарым юҡ арала.
Әҙәм ҡайтмаҫ һыртҡа күскән улар,
Йөрәгемде минең яралап...
Улар минән яҡшыраҡ та ине,
Хәтәр ине улар!..
Йөрәкле.
Сафтарыбыҙ һирәгәйә бара,
Һирәгәйә бара тирәклек.

“Улар минән яҡшыраҡ та ине” тип, инде мәңгелеккә күскән аҡ күңелле дуҫтарын үҙенән өҫтөн ҡуйып, шағир ил улдары булып йәшәп донъя ҡуйған уҙамандарҙың рухын юғары күтәрә. Күренеп тора: шағир композицион контрасты шиғырҙы аҡлау сараһы итеп файҙалана. Ошо поэтик алым “Ә хәҙергә ниңә зарланырға” тип исемләнгән шиғри шәлкемдә лә уңышлы эшләнгән. Алты бүлектең дүртәүһе “Ә хәҙергә ниңә зарланырға” тигән теҙемдән башлана. Ә бүлектәрҙең йөкмәткеһе “зарланырға һис урын юҡ” тигәнерәк мәғәнәне бирә. Өсөнсө бүлек, миҫал өсөн, бына нисек үҫтерелгән:

Ә хәҙергә ниңә зарланырға,
Мыжырға мин әллә елме ни?
Ямғыр төшә,
Эре орлоҡмо ни,
Ҡоштарыма яҙыр емме ни?
Ҡуҙғалмаһын,
Лыпын ултыра бит

Яуындарҙың беҙҙә тандыры,
Башҡынайым минең сатнап бара,
Ишһен әле мине ямғыры.

Тимер Йосопов шиғырҙары лирикала композиция ҡоролошоноң ниндәй ҙур, мөһим әһәмиәткә эйә булыуы тураһында һөйләй. Шиғырҙы аҡлау, йәғни әҫәрҙәге поэтик фекерҙе тойомло кәүҙәләндереү өсөн композиция — иң күп иңләүсе (макрообразлылыҡ) художество сараһы икән. Ул әҫәр эсендәге бөтә башҡа компоненттарҙы бер бөтөн итеп ойоштора. "Тағы ҡолон хаҡында" тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ике образ — ҡолон һәм бала саҡ, әҫәрҙе ҡоршап килеүсе контраст һындар. Йәп-йәш, ыуыҙ ғына ҡолон һәм әллә ҡасан үткән бала саҡ. Тәү ҡарашҡа бер-береһенә ҡапма-ҡаршы торһалар ҙа, ысынында улар араһында тәрән оҡшашлыҡ ята. Ҡешенең дә бит бала сағы ҡолон кеүек!

Ҡил әле, ҡолоном,
Ҡил әле,
Башыңды терә иңемә.
Һин мине алып кит алыҫҡа,
Алып кит бала саҡ иленә.
...Бала саҡ иленә саптым мин,
Тотам да ҡалмайса ҡолондан.

Уйнаҡлап сабып киткән ҡолон артынан эйәреп, шиғыр ҙа алға тәгәрәй. Ҡолон менән Бала саҡ иле, юлдан юлға күсеп, композицияны нығыта, әҫәр төҙөлөшөн ынтылышлы итә. Тимер Йосопов лирикаһында композицияның, шулай итеп, оло поэтик бурысты тормошҡа ашырыусы художество сараһы дәрәжәһенә күтәрелеүе, һис шикһеҙ, бөгөнгө башҡорт поэзияһының ҡаҙанышына тиң.

Был мәҡәлә уҙған 2015 йылда яҙылғайны. Тимер ағай уны күреп, оҡшатып: "Рәхмәт, күңелем булды!" — тип хуплағайны. Оҙаҡламай үҙе арабыҙҙан китеп барҙы. Шуға был мәҡәләне баҫмаға үҙгәрешһеҙ биреүҙе урынлы таптым...

*Переделкино, 1997 йыл. Тимер Йосопов — һулдан өсөнсө*

